Хәмзә Ишдәүләтов

# Йәмле Әселе буйҙары



Үҙебеҙ йәшәп айҡанлы
Күмертау үҙәк библиотекаһына
автор Хәмзә Мотаһар улы
Ишдәүләтовтан иҫтәлеккә
2015 йыл Күмертау ҡалаһы
[signature] (Ишдәүләтов)

**Хәмзә Ишдәүләтов**

# Йөмле Әселе буйҙары

2015

*ББК 84-5*
*И 97*

*Хәмзә Ишдәүләтов - **Йәмле Әселе буйҙары***
*Шиғырҙар һәм проза. Мәләүез,*
*Мелеузовский информцентр -*
*филиал ГУП РБ ИД «РБ», 2015 йыл - 62 бит.*

*@ Ишдәүләтов, 2015 й.*



## Автобиография

Мин Ишдәүләтов Хәмзә Мотаһар улы, 1954 йылдың 15 мартында, Ейәнсура районы Мөхәммәтйән ауылында, биш балалы ғаиләлә, һуңғы бала булып донъяға килгәнмен. Абзан ауылы урта мәктәбен тамамланым. Совет Әрмеһе сафында хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Күмертау ҡалаһына юлландым һәм Ҡансыра ер аҫты газ һаҡлау станцияһына эшкә керҙем. Контроль үлсәү ҡорамалдары һөнәрен үҙләштерҙем.

Тормош иптәшем Мәрйәм Ғиниятулла ҡыҙы менән ике ҡыҙ бала тәрбиәләп үҫтерҙек.

Шиғриәткә, әҙәбиәткә мин һуңлап, 55 йәшем үткәс кенә тотондом. Тәүге шиғырҙарым, Күмертау ҡалаһы һәм Көйөргәҙе районы берләшкән гәзите, "Юшатырҙа"донъя күрҙе. "Ағиҙел" журналында бер нисә шиғырҙарым баҫылып сыҡты.

Был шиғырҙар йыйынтығым минең тәүге китабым. Унда мин үҙемдең шиғырҙарымды һәм хикәйәмдән тыш, ауылдаштарым, күренекле шағир

Мөхәммәт ағай Илбаевтың һәм Ғилман ағай Идрисовтың шиғырҙарын йыйынтығыма кертеүҙе кәрәкле тип таптым.



## Йөмле Әселе буйҙары

*йыр Х. Ишдәүләтов һүҙ. һәм муз.*

Йөмле Әселе буйҙары,
Сәскәле болондары.
Зифа буйлы, ҡыйғас ҡашлы,
Ауылымдың ҡыҙҙары.

Эх, Әселе буйҙарын,
Һағынып ҡайтып урайым.
Һыу буйҙарын буйлайым,
Һыуын эсеп туймайым.

Йөмле Әселе буйҙарын,
Йырҙар йырлап уҙаһы.
Тәнгә сихәт, йәнгә рәхәт.
Һулап туймаҫ һауаһы.

Ҡушымта.

Тыуған яҡтың һауаһы,
Мең ауырыуға дауалыр.
Көс ғәйрәтемде арттыра,
Югереп менһәм тауҙары.

Ҡушымта.

## Рәхмәт ауылдаштар

Ауылыма нигеҙ һалған саҡта,
Борон беҙҙең ата бабалар,
Исем итеп тыуған ауылыма,
Пәйғәмбәр исемен алғандар.

Мөхәммәтйән тигән данлы ауыл,
Данлы булды борон- борондан.
Күренекле яҡташтарым сыҡты,
Ябай ғына ошо ауылдан.

Күп ауылдар таралышып бөттө,
Заман еле шулай эшләне.
Ауыл нигеҙ ташы таралманы,
Йәш елкәнсек ташлап китмәне.

Оло рәхмәт һеҙгә ауылдаштар,
Ҡайтыр төбәгебеҙ булғанға.
Мең йәшәгеҙ минең ҡәҙерлеләр,
Изге теләк һеҙгә хоҙайҙан.

## Ауыл иртәһе

Таң һыҙыла офоҡта,
Ҡоштар һайрай таллыҡта,
Егет менән ҡыҙ серләшә,
Һыу буйында аулаҡта.



Аҡ томан күтәрелә,
Ҡаршы тау итәгенә,
Йылғала ул төн үткәрҙе,
Ҡунғайны кисләп кенә.

Таң әтәстәре ҡысҡырҙы,
Ауыл йоҡоһо ҡасты,
Егет кискә кил тағы тип,
Ҡыҙҙы үҙенә ҡысты.

Йәш килен көйәнтә аҫып,
Шишмәгә һыуға төштө,
Кемдер күнәк зыңғырҙатып,
Һыйыр һауырға сүкте.

Һөттөң тәүге тамсылары,
Төйҙә күнәктең төбөн,
Илаһи бер моң шул саҡ,
Ҡапланы ауыл өҫтөн.

Ҡояш тора йоҡоһонан,
Туҡмаҡ тауы артынан.
Көтөү китте урам буйлап,
Күтәрелде саң туҙан.

Кемдер трактор ҡабыҙҙы,
Кемдер сүкей салғыһын,
Бер кемдеңдә йәйге эштән,
Килмәй тороп ҡалғыһы.

Ҡояш менән бергә тора,
Ауыл кешеһе көндә,
Йәйҙең алтын һәр бер көнө,
Бер йыллыҡ уңыш бирә.

## Башҡортостан илгенәм

Башҡортостан илгенәм,
Күп милләтле төйәгем,
Йырҙарымда һине данлап,
Шашып тибә йөрәгем.

Ҡоштарың күп туғайың,
Йәнлегең күп урманың,
Далаңдың сәскәләре,
Хуш еҫтәр бөркөүҙәре.

Ҡояштың нурҙарына,
Балҡый Урал таштары,
Һөйгән ерем илгенәм,
Минең данлы ватаным.

Моңло ҡурай тауышы,
Үткәндәрҙең һағышы,
Бөгөнгөнөң шатлығы,
Киләсәктең яңмышы.

Ҡайҙа бар бындай төбәк,
Күрһәт бармағың төбәп,



Минең данлы ватаным,
Рәсәйгә оло терәк.

Башҡортостан гәзиз ерем,
Минең данлы Ватаным.
Күк көмбәҙең аяҙ булһын,
Тыныс атһын һәр таңың.

## Күмертауым минең данлы ҡалам

*йыр Х. Ишдәүләтов һүҙ. һәм муз.*

Күмертауым минең данлы ҡалам,
Һиндә үтте йәшлек йылдарым.
Һиндә таптым тәүге һөйөүемде,
Һине данлай минең йырҙарым.

Эй Күмертау данлы ҡала,
Данлы шахтерҙар ере.
Эшсән егеттәрең һәм ҡыҙҙарың,
Барлыҡ донъяның күрке.

Зәңгәр күкте байҡап оса,
Тимер ҡанатлы ҡоштарың.
Бар донъяға дан ҡаҙанды,
Һинең вертолеттарың.

Эй Күмертау данлы ҡала,
Данлы шахтерҙар ере.

Эшсән егеттәрең һәм ҡыҙҙарың,
Барлыҡ донъяның күрке.

Күмертауым минең данлы ҡалам,
Йәм-йәшелгә күмелгән урамдар.
Йөрәктәктәргә дауа саф һауаң,
Һинең менән мин ғорурланам.

Эй Күмертау данлы ҡала,
Данлы шахтерҙар ере.
Эшсән егеттәрең һәм ҡыҙҙарың,
Барлыҡ донъяның күрке.

## Ҡыр ҡаҙҙары китә

***йыр. Х. Ишдәүләтов. муз.***

Һалҡын көҙҙәр етә,
Ҡыр ҡаҙҙары китә.
Ҡаңғылдашып ҡанат ҡағалар.
Сихри тауыштары,
Һағыш тулы минең,
Йөрәгемә яра һалалар.

Ҡыр ҡаҙҙары китә,
Йөрәк әрнеп көтә,
Һүндермәйсә һөйөү хистәрен.
Ҡайтыр юлдарымда,
Тағы оҙаҡлаһам,
Сабыр бул һин иркәм, көт йәме.



Ҡыр ҡаҙҙары китә,
Беҙҙең ғүмер үтә,
Һиҙҙермәйсә аҡҡан, һыу кеүек.
Әрнеп янған, минең йөрәгемдә,
Тибрәлдереп сихри моң кеүек,
Ғүмер үтә аҡҡан һыу кеүек.

## Йәшлек йыры

Йәшлек бит ул был ғүмерҙең
Иң күркәм гүзәл таңы.
Хыялдарҙың елкән ҡороп,
Диңгеҙҙә йөҙгән сағы.

Йәшлек бит ул моң хистәрҙең,
Ашығып ташҡан сағы.
Тәбиғәттең нурға сумып,
Ҡояшлап көлгән яҙы.

Йәшлек ул йәш йөрәктәрҙең,
Бергә ҡауышҡан сағы.
Ғүмерлеккә ялҡынланып,
Дөрләп янған усағы.

Зәңгәр томандар артында,
Ҡалһаңда йәшлегем һин.
Фәрештәләй ҡанат йәйеп,
Яндарыма осоп кил,
Һөйгәнемде алып кил.

## Эшсән тумыртҡа

Туҡ-туҡ итә тумыртҡа,
Тишек тишә ағаста,
Табып алһа табышын,
Ала тамаҡ ялғапта.

Көнө буйы туҡылдап,
Суҡышы нисек түҙә,
Ағастарҙан ҡорт сүпләп,
Ҡалдыра селтәр биҙәк.

## Оҫта үрмәксе

Ағас ботаҡтарына,
Үрмәксе ауын үргән,
Ундай матур ау үрергә,
Үрмәксе ҡайҙан белгән.

Ау үреүсе булғандыр,
Олатаһы бабаһы.
Ау үрергә өйрәткәндер,
Туғандары ағаһы.

Берсә үргә үрләй ул,
Ау ептәрен тарата,
Себендәргә ау һуҙып,
Эләктерә тоҙаҡҡа.

## Йәйғор күперен һалды

Уйнай инек йәшенмәк,
Ямғыр яуҙы йәшенләп.
Йәшен атып ҡотто алды,
Уйыныбыҙ туҡталды.



Борсаҡ кеүек һибелдек,
Өйгә табан йүгерҙек.
Япма аҫтына йыйылдыҡ,
Ҡурҡыуҙан беҙ тын ҡалдыҡ.

Яуған ямғыр туҡтаны,
Тирә яҡ тып тын-ҡалды.
Туҡмаҡ тауҙан Ҡаршы тауға,
Йәйғор күперен һалды.

## Мәктәбем, уҡытыусым

Сағыу ҡояшлы көҙҙөң,
Иң беренсе көнөндә.
Күркәм йорттоң ишектәрен,
Балалар асып керә.

Әллә ҡайҙан йыраҡтан,
Диңгеҙҙәге маяҡтай.
Һәр баланың йөрәгенә,
Нурҙар бөркә ҡояштай.

Белем ҡапҡаларын аса,
Һәр бала ошо йортта,
Хыялында карап төҙөп,
Йыһан киңлектәренә оса.

Әй, мәктәбем, нурлы йортом,
Иң тәүге уҡытыусым.
Әсәй, Атай һәм һинәндә,
Ҡәҙерле кешем юҡтыр.

## Яҙ килә

Яҙғы көн ярты аҡыл,
Әле ҡояшлап көлә.
Әле ҡараһаң услап,
Биткә ҡарҙарын һибә.
Әллә шулай шаяра,
Уҙған ҡышты уйната.
Һинең көнөң утте тип,
Мин минлеген аңлата.

## Әҙәпле бала

Әҙәпле бала тормошта.
Һәр яҡлап була уңған.
Беҙҙең инәй бабайҙарҙа,
Әҙәп тәүфиҡле булған.
Тыуған ил, ереңде һаҡла,
Үҙ телеңдә һин һөйләш.
Ата – Әсәйеңде ярат
Ярҙам ит, ҡартлыҡ килгәс.
Ярҙамсыл бул һәр кешегә,
Мөләйем бул, йомшаҡ һөйләш.
Юҡҡа барға үпкәләмә,
Кеше әйберенә теймә.
Әҙәп төбө матур ғәҙәт,
Хеҙмәт итергә өйрән.
Һәр ваҡыт уҡы, белем ал,
Башҡаларҙы ла өйрәт.



## Яңы йыл килде ергә

Яңы йыл килде ергә,
Ҡыш бабай килде беҙгә.
Ҡар һылыу менән бергә,
Бүләктәр бирҙе беҙгә.

Шыршы ҡуйҙыҡ ҙур залға,
Ундай елка бар ҡайҙа.
Уйынсыҡтарҙы элдек,
Матур итеп биҙәнек,
Йырҙар йырлап әйләндек.

## Минең Өләсәйем

Өләсәйем бик уңған,
Таң һарыһынан торған.
Беҙ тороуға ул өлгәргән,
Тәмле ҡоймаҡтар ҡойған.

Тәмле сәйен мул һалып,
Табаға ҡоймаҡ һалып.
Ҡаймаҡлап сәй яһаны.
Эй, рәхмәт кенә яуһын.

## Һөйөү көсө

Килтерҙеләр һине палатаға,
Каталкаға һалып табиптар.

Йоҡлай инең, тында алмай инең,
Яңы ғына тыуған сабыйҙай.

Күреп һинең һәттәй аҡ йөҙөңдө,
Йән-тәндәрем китте зымбырҙап.
Үлем тигән йән тетрәткес ҡайғы,
Тора ине һине һағалап.

Күпме ятҡанһыңдыр шулай өнһөҙ,
Бына астың көскә күҙҙәреңде.
Ирендәреңде көскә ҡыбырҙатып,
Теләй инең, әйтер һүҙҙәреңде.

Мин янында тинем, күҙ нурҡайым,
Йылмайғандай булды күҙҙәрең.
Һөйөү көслө,ҡыуҙым мин үлемде,
Сабыр бул һин иркәм, түҙ йәме.

## Әсә мираҫы

Беҙ биш бала үҫтек, әсәй ҡуйынында,
Тал сыбыҡтар кеүек, һиңә һыйынып,
Үҫеп еткәс тормош һуҡмаҡтары буйлап,
Төрлө тарафтарға юл алдыҡ.

Оло юлға оҙатҡанда беҙҙе әсәй,
Өгөт нәсихәттәр әйтеп торманы,
Ҡайҙа баҫҡаныңды балам үҙең ҡара,
Тормош һуҡмаҡтары була бормалы.



Әсәйемдең әйткән изге теләктәрен,
Хәтер һандығымда мәңге һаҡлайым,
Сөнки ошонан да бай мираҫты,
Бер ерҙә лә эҙләп тапманым.

## Һау бул тундра

Һау бул Төньяҡ, һау бул тундра,
Һау булығыҙ ҡарлы яландар,
Һау булығыҙ ыжғыр бурандарҙа,
Ҡойон булып яуған аҡ ҡарҙар.

Һау бул Төньяҡ, күлдәр иле,
Ҡоштар иле йәйге айҙарҙа,
Һау булығыҙ ҡыҫҡа йәй эсендә,
Сәскә атҡан матур аҡландар.

Һау бул Төньяҡ, һау бул тундра,
Һау булығыҙ ҡарлы яландар,
Яҙын ҡайтҡан ҡоштар кеүек мин дә,
Тыуған яҡтарыма бөгөн юл алам.

## Данлы шағир олатай

Ауыр һуғыш юлдарынан,
Миҙалдар тағып түшенә.
Мостафа олатай ҡайтҡан,
Еңеү алып иленә.

Тыныс тормошто ул данлап,
Шигри юлларға һалған.
Кән тимәгән,тән тимәгән,
Ижад утында янған.

Данлы ижад юлы үттең,
Мостай Кәрим олатай.
Балаларға бүләк иттең,
"Оҙон-оҙаҡ бала саҡ".

Ватанымдың һүнмәҫ даны булдың.
Ул дан йәшәй әле бөгөн дә.
Мостай Кәрим ул мәңге тере,
Рухың йәшәй беҙҙең күңелдә.

## Урап үттең

Айҙар үтә, йөрәк көтә.
Ҡауышыу минуттарын.
Йылдар үтә,ғүмер үтә,
Таралмай һағыштарым.

Төштәремә инәһең һин,
Болондағы сәскәләй.
Алһыу биттәреңдән үбәм-
Ҡулың минс иркәләй.

Күпме көттөм, сабыр иттем,
Һүрелтмәй һөйөү утын.
Башҡаларға күңел һалдың,
Һин мине урап үттең.
Һағышлы, моңло иттең…



## Кеше ғүмере

Һәр миҙгелдең ерҙә үҙ йәме бар,
Ҡыштың ҡар бураны,һалҡыны.
Илай-илай көләп килгән яҙы,
Йәмле йәйе, йомарт көҙ айы.

Йылдың миҙгелдәре йылда килә,
Яҙы йәйе, көҙө, ҡыш айы.
Кеше ғүмерҙәре ҡабатланмай,
Ҡайтмаҫ өсөн китә йылдары.

Ғүмер юлың яҡты эҙ ҡалдырһын,
Һыҙланырлыҡ һиңә булмаһын.
Бәхет шатлыҡ менән ҡартлыҡ килһен,
Үкенерлек һиңә булмаһын.

Мин шағир тип, ҡай берәүҙәр күкрәк кирә.
Яҙған шиғырҙары тормай һуҡыр тиндә.
Һүҙ башында ул, янып маҡтай үҙен,
Аҙағында туҡтап ҡала, тапмай һүҙен.

## Тәүге мөхәббәт

Яуа аҡ ҡарҙар,
Ниндәй саф һауа.
Аҡ ҡар өҫтөндә,
Беҙҙең эҙ кала.

Беҙ икәү бергә,
Тып-тын урамда.
Һөйөү хистәре,
Көслө бурандай,

Йөрәк тибешен,
Тойоп атлайбыҙ.
Һөйөү хистәрен,
Яныл һаҡлайбыҙ.

Күп йылдар үтте,
Беҙ икәү бергә.
Ҡыуаныс менән,
Йәшәйек ерҙә.

## Уҙған ғүмер

Иламаным тормошомда,
Илар саҡтар булһа ла.
Көнләшеүҙән ҡай берәүҙәр,
Юлдарымды ҡыйһа ла.
Тир түгеп таптым икмәкте,



Эш юҡ тип ултырманым.
Тормош йөгөн алға тарттым,
Еңел кәсеп ҡыуманым.
Нужа күреп үҫтем үҙем,
Ҡара йәшемдән эшләп.
Булды ваҡыт ас ултырҙыҡ,
Туйманыҡ ашап икмәк.
Иртә яҙҙан китә инек,
Эҙләп ҡаҡы, ҡуҙғалаҡ.
Ҡайҙа инде өҫтә кейем,
Ялан баш ялан аяҡ.
Донъя көттөм әҙәп һаҡлап,
Ситтекенә теймәнем.
Аҡыллынан үрнәк алдым,
Юнһеҙгә баш эймәнем.
Тормош еле аяманы,
Итәк еңемдән тартты.
Үрҙәргә үрләгән саҡта,
Түбәнгә табан атты.
Нисек булһа шулай көйө,
Ғүмер үтә лә китә.
Ерҙә нисек йәшәһәң дә,
Һуңғы юл беҙҙе көтә.

## Шифалы күл Талҡаҫым

*йыр Х. Ишдәүләтов һүҙ. һәм муз.*

Күк Ирәндек буйында,
Шифалы күл Талҡаҫым.
Күпме илдәр,ерҙәр күрҙем,
Һиндәй күлде тапманым.

Тәнгә шифа,йәнгә сихәт,
Талҡаҫымдың һауаһы.
Ял итергә саҡырабыҙ,
Сит илдәргә бармағыҙ

Диңгеҙ кеүек йәйрәп ята,
Шифалы күл Талҡаҫым.
Бында йәшәй, бында эшләй,
Кешеләрҙең уңғаны.

Тәнгә шифа,йәнгә сихәт,
Талҡаҫымдың һауаһы.
Ял итргә саҡырабыҙ
Сит ерҙәргә бармағыҙ.

## Эй һылыу ҡыҙ Дилара

Эй һылыу ҡыҙ Дилара,
Күңелемә юл яра.
Уны уйлап төндәр үтә,
Йөрәгем шуға яна.



Эй Дилара, Дилара,
Күңел ниңә болара
Һине уйлап йөрәк яна,
Мөхәбәткә сорнала.

Эй һылыуым Дилара,
Йөрәкте ғаҙаплама,
Хистәрҙе юғәнләп булмай,
Үпкәләмә Дилара.

Эй Дилара, Дилара,
Күңел ниңә болара.
Һине уйлап йөрәк яна,
Мөхәбәткә сорнала.

Эй һылыуым Дилара,
Күңел ниңә болара.
Ҡарт алаша алйыған, тип
Бер үк кенә уйлама.

Эй Дилара, Дилара,
Күңел ниңә болара.
Һине уйлап йөрәк яна,
Мөхәбәткә сорнала,
Эй һылыу ҡыҙ Дилара,
Йөрәгем белеп яна.

## Бәйгеләрҙә елгән толпар кеүек

*Яҡташым, ауылдашым,*
*Морат ағай Илбаевтың яҡты иҫтәлегенә арнайым.*

Бәйгеләрҙә елгән толпар кеүек,
Арыу,талыу белмәнең һин тормошта.
Һүнгән саҡта күңел усаҡтарың,
Йырың булды һиңә моң юлдаш.

Иртә киттең беҙҙең арабыҙҙан,
Күпме йыр моң ҡапыл өҙөлдө.
Хәлһеҙләнеп түшәгеңдә ятҡан саҡта,
Хаҙай бирҙе һиңә түҙемде.

Әселе лә буйы тау шишмәләр,
Шишмәләрҙән моңдар алдыңмы.
Йөрәгеңдән сыҡҡан хистәреңде,
Йырҙарыңа ҡушып һалдыңмы.

Елбәҙәкләп яуа ап-аҡ ҡарҙар,
Аҡҡа төрөп барса донъяны.
Тыныс йоҡо һиңә яҡташыбыҙ,
Ғүмереңдән яҡты эҙ ҡалды.



## Мәңгелек мөхәббәт

*йыр Х. Ишдәүләтов һүҙ. һәм муз.*

Иҫеңдәме иркәм айлы кистәр,
Таш буйының шаулы уйыны.
Икәү бергә ҡаршы алған таңдар.
Шишмә буйы тәүге һыу юлы.

Онотмайыҡ иркәм туй табынын,
Гәлсәр бокалдарҙың моңло сыңлауын.
Хыялдарға яҡты өмөт биргән,
Беҙҙең йәшлегебеҙ йырҙарын.

Рәнйетмәйек иркәм күңелдәрҙе,
Ут һалһаҡта сабыр йөрәккә.
Хәтерләйек тәүге мөхәббәтте,
Яҙғы сәскәләрҙе бүләккә.

## Хыялый йәшлек

Йәшлегемдә ғашиҡ булдым,
Бер матур һылыу ҡыҙға.
Уның өсөн риза инем,
Керергә утҡа һыуға.

Ул ҡояшым айым ине,
Йондоҙом ине күктә.
Тормошомдоң йәмен тәмен,
Күрмәнем унһыҙ һистә.

Тик һөйгәнемдең йөрәген,
Ете яттар яуланы,
Төп башына ултырттылар,
Минең кеүек аңраны.

Мин мөхәббәт серҙәрендә,
Булдым хәҙер ҙур белгес.
Алманы ла өрөп ҡабам,
Ирендәрем бер көйгәс.

Йөрәгем һулҡылдап тибә,
Юҡтыр уға дауаһы ,
Өрөп бәйләп ҡуйыр инем,
Күренмәй шул яраһы.
Юҡтыр инде дауаһы,
Ҡайҙан духтыр табаһы.

## Ҡышҡы юлда

Ябалаҡлап ҡарҙар яуа.
Аҡ юрған яба ергә.
Әрһеҙ ел эштән туҡтамай.
Юлға һырынты өйә.

Ҡара юрғам лерт-лерт баҫып,
Ҡарлы һуҡмаҡтан елә.
Тойаҡ аҫтындағы ҡарҙы,
Ҡойондай биткә һибә.



Тирә юндә сихри тынлыҡ,
Уяу һайыҫҡан һаҡта.
Юл ситендәге шыршылар,
Һаҡсылар кеүек баҫҡан.

Ҡыштың оҙон юлдары,
Ҡайҙарға илтер икән.
Ҡарлы- буранлы һыуығы,
Мине өшөтмәҫ микән.

Ғүмер юлым, сана эҙе,
Ҡарға күмелеп ҡалды.
Яҙын шаулап ҡар һыуына,
Ҡушылып ҡайҙа аҡты.

## Почта таратыусы ҡыҙға

Эй Сәрийә һине күрһәм,
Йөрәгем леп-леп тибә.
Теҙ быуындарым йомшара,
Эй ҡартлас тим, түҙ генә.

Эллә йәшлегемә ҡайтам,
Уянды мөхәббәтем.
Эллә яңы төшөнәмен,
Донъяның ысын йәмен.

Биш баҫыуымды бер баҫып,
Янына килеп етәм.
Эллә һине күргем килә,
Эллә "Агиҙелемде" көтәм.

## Хыял атым

Көтәм һине иркәм, ҡояш батҡас,
Төңгө ергә килеп, һиллек ятҡас.
Көтәм һине иркәм, таңдар атҡас,
Шаян елдәр килеп, тәҙрә ҡаҡҡас.

Йоҡом осто, күҙгә йоҡо кермәй,
Хыял атым мине, алға әйҙәй.
Уйҙарымда ҡайтам, һинең янға,
Ҡайтам һинең янға, хыял атта.

Ғүмер үтер микән, һине көтөп,
Күпме түҙер кәрәк, сабыр итеп.
Хыялыма урын, ҡалды микән,
Йоҡом бөткән, һине көтәм иркәм.

## Себер юлындағы уйланыуҙар

Себер һүҙе халыҡ күңелендә,
Ҡайғы булып ҡалған уйылып.
Ошо юлдан эшкә китеп барам,
Уйҙар килә юлдай һуҙылып.

Батша заманында ошо юлдан,
Күпме кеше киткән һөргөнгә.
Тыуған ерҙәренә бик әҙҙәре ҡайтҡан,
Бик күптәре ҡалған мәңгегә.



Тимер тәгәрмәстәр сыңлауында,
Бығау тауыштарын ишетәм.
Ниндәй яҙмыш тартты һине халҡым,
Аҡыл етмәй, ҡай саҡ иҫ китә.

Азат Совет иле бар сағында,
Тимер юл төҙәүгә ҡыуҙылар.
Юл төҙөгән саҡта меңәрләгән,
Эҙһеҙ ҡәберлектәр ҡалдылар.

Туҡ-туҡ иткән тимер тәгәрмәстәр,
Хәтерләтә бығау сыңдарын.
Кеше ҡарғыштары ҡәһәрләйҙәр,
Мәңгелеккә Себер юлдарын.

Яңы быуат башы, кеше хәҙер,
Үҙе теләп китә Себергә,
Оҙон аҡса түгел, яҙмыш еле,
Донъя буйлап шулай йөрөтә.

Эшһеҙлектән интегәләр күптәр,
Эше булһа юҡтыр аҡсаһы.
Ҡайҙа барһын инде ябай халыҡ,
Эҙләп китә бәхет баҡсаһын.

Себер ере бай нефткә газға,
Ул байлыҡтан кемгә ҙур файҙа.
Ябай халыҡ бушҡа эшләп ҡайта,
Өшөп ҡалтыранып һыуыҡта.

Хоҙай биргән байлыҡ тәләфләнә,
Ҡомһоҙлоҡтан нәфсе талашып,
Килер быуындарға ни ҡалыр һуң?
Хафалы уй йөрөй аҙашып.

## Ғүмер кисем яҡынлаша

Бына илле йәшкә килеп еттем,
Сәстәремә күптән сал ҡунған,
Әммә һис тә ҡартайһы килмәй,
Был йәшәүҙән ерҙә, кем туйған.

Һиҙәм, ғүмер кисем яҡынлаша,
Бер саҡ байыр - ҡасан белгеһеҙ,
Эшләйһе эштәрем бик күп,
Ҡояшымдың килмәй һүнгеһе.

Уйлай ҡалһаң илле йәшлек ғүмер,
Күпме борма юлдар ҡалдырған,
Күпме борсолоуҙар алып килгән,
Ҡайғы шатлыҡ йөрәк яндырған.

Үткән тормошомдо барлайымда,
Ҡарт киләсәгемде уйлайым,
Йырлайһы йырҙарым бик күп,
Был йәшәүҙән һис тә туймайым.



## Йәшлек яҙҙарыма бер ҡайтаһы ине

Йәшлек яҙҙарыма бер ҡайтаһы ине,
Арып талып үткән ғүмер юлымдан
Йөрәгемә бәлки тынғы табыр инем,
Тәүге һөйөүемде тапһам шул юлда.

Йәшлек яҙҙарыма ҡайтыу мөмкин түгел.
Хыялымда ғына ҡайтып урайым.
Хыялланмай ғүмер итеүҙәре ауыр,
Бары яҡшылыҡҡа уны юрайым.

# Ғибрәтле үлем

Дәүләт әбейе яһап ултыртҡан сәйен ҡабалан, ашыҡ-бошоҡ эсте лә , яңыртып сәй яһарға тип ҡулын һуҙған әбейе Сәлимәгә күтәрелеп ҡарамай, үҙ алдына ғына әйткән кеүек.

- Юҡ башҡа эсмәйем - тип сынаяғын түңкәрҙе. Хуш итеп битен һыпырҙы ла, ойоп ҡатҡан аяҡтарын көскә яҙып тигәндәй, урындыҡтан иҙәнгә төштө. Әбейе:

- Абау, бабай, ул ни иткәнең булды бөгөн, индей сәйемде мул һалып бешергән инем, хәҙер уны кем менән эсәм инде, әрәм була бит - тип һөйләнде. Дәүләт ҡарт әбейенә күтәрелеп ҡараны ла:

- Көн боҙолорға тора, буран сығыр, ахыры. Һөйрәтеп алып килгән кәбән төбөндә, бер күбәләй бесәнең ҡалды, Дәүләт олатай, Буран сығып, улай былай ҡар баҫып киткәнсе, берәренә әйтеп булһа ла алдырып ҡуй - тине. Теге Нуруллаmaking уртансы улы, кем булды һуң әле, исемдәрен һәр саҡ шуларҙың бутайым . – Әй Ғәйнулла бит әле исеме тип һөйләнде.

- Әллә шул бабай, яңғыҙыңа ауыр булыр, эш ҡыра алырһыңмы икән һуң? Бик булмаһа, күрше малай-шалайға әйтәйек, ат тотоп торһа ла үҙеңә ярҙам булыр.

- Ауыр булмаҫ, күп нәмә ҡалмағандыр әле. – Юнлеһен, мал-тыуарға ашарға ярарлығын ғына тейәйем. - Кәбән төбөндә ергә һылашып ятҡаны бурһый, күгәрә, күгәргән-ниткәнен алып тормайым -



тип әбейен тынысландырҙы. үрелеп мейес башынан бүмаһын алып кейҙе, өҫтөнә ишек төбөндә сөйҙә элеүле торған бишмәтен алып кейгәс, билен уңып төҫөн юғалта башлаған билбауын алып быуҙы. Ул арала әбейе мейес кәштәһендә ятҡан тиренән тегелгән бейәләйен алып бабайына һуҙҙы.

- Үҙең йөндән бәйләгән бейәләйеңде лә бир, һәнәк һабын тоторға уңайлы, ул бейәләй менән - тине. Бабайы.

- Мин конный дворға атҡа барып киләм, юнле ат ҡалған булһа инде - тип һөйләнә-һөйләнә сығып китте. Сәлимә әбей иртәнге сәйе бүленгәс, ҡабат ултырып бер сынаяҡ сәй эскәнсе, бабайы ат егелгән бесән санаһына ултырып ҡапҡаһы төбөнә килеп туҡтаны. Атты ҡапҡа бағанаһына элдектерҙе лә, кәртә-ҡураһы яғына үтеп бесәнлектән ҡыҫҡа ағас һаплы тимер һәнәген алды. Келәтен асып сөйҙә элеүле торған арҡанын яурыны аша һалып, санаһына табан атланы. Алып сыҡҡан кәрәк-яраҡтарын санаһына урынлаштырғас, сананы, егеүле атты тағы ла бер тапҡыр күҙенән үткәрҙе лә, үҙ эшенән ҡәнәғәт төҫ сығарып өйөнә инеп китте. Өй ишеген асып инер инмәҫтән:

- Ат йәтеш булды, конюх Хөснәлхаҡ үҙенең егеүле әҙер атын бирҙе. Аты йәш дыуамалыраҡ инде, әммә салт, ҡыуыу кәрәкмәй. Мин оҙаҡлап йөрөмәм, алыҫ ер түгел бит, төшкә сәйгә ҡайтып етәрмен алла бирһә-тип, - әбейенә тултырып бер ҡараны ла сығып китте.

Дәүләт ҡарттың сабынлығы Өйәңке йылғаһы буйлап, ауылдан күп булһа ике-өс саҡырым ер булыр.

Быйыл сабынлығында үлән, Сайырлы ауылы кешеләре әйткәнсә, бил быуарҙан булып үҫте. Дәүләт ҡарт ауылды сыҡҡас, көмәрә арҡаһын алға табан ҡуйып, санаға йәш саҡтарындағы кеүек ҡырын төшөп ятты ла:

- На, малҡай әйҙә, ҡартлыҡта бер елдереп йөрөп ҡайтайыҡ - тип еңелсә генә дилбегәһен ҡаҡҡайны, шуны ғына көткән кеүек, көрән бейә ажарланып ҡыш ҡы юлдан алға ынтылды.

Эйе, ғүмер тигәнең аҡҡан һыу кеүек инде, тик эҙе генә күренмәй. Бына Дәүләт ҡарт менән әбейе Сәлимә, һикһәнде үтеп туҡһандың уртаһына етеп киләләр, әле икеһе лә шап-шаҡтай, бер-береһен ҡарап тигәндәй, көңгөр-ҡаңғыр килеп донъя көтәләр. Балалары барыһы ла ауылда ҡалып донъя ҡорҙолар. Өлкәнерәктәре үҙҙәре әбей бабай булдылар инде. Ейәндәре көн дә тигәндәй килеп, утынын бысып, ярып, мал аҫтын таҙартып, һыуына тиклем ташып китәләр. Рәхмәт инде, аҡыл тәүфиҡтәре булһын, донъялар имен-аман торһон.

- Эйе, әлегеләй күҙ алдында тора, Сәлимәнең һылыу йәш саҡтары, Дәүләт ул саҡта ауылда, егеттәрҙең иң бересеғәре ине. Күпме Сәлимә артынан йүгерҙе ул саҡтарҙа Дәүләт, күпме йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙе, әммә Сәлимә уға ҡараманы, күрше ауыл егете Усманға кейәүгә сыҡты. Усман ни яғы менән арбағандыр инде Сәлимәне, Дәүләт ғүмере буйы уйлаһа ла, серен белә алманы. Ҡыҙҙарына бер йәш тулғас, урманга өйләк ағас ҡырҡырға барғанда, Усман ағас аҫтында ҡалып, фәжиғәле һәләк булды.



Сәлимә кейәүгә сығып күрше ауылға оҙатылып киткәс Дәүләткә ҡояш һүнгән, донъя бөткән кеүек булды. Әлләә ауылды ташлап баш һуҡҡан яҡҡа сығып китергә инде тип ниәтләгән ине, атаһының:

- Сабыр бул улым, Сәлимәнән башҡа ла ҡыҙҙар бөтмәгән. Бына Алла бирһә көҙгә кәләш әйттерербеҙ - тип күңелен табырға тырышты. Дәүләт бер нәмәлә әйтмәне, өндәшмәне, йөрәгенең ярһыуын, теш тәрен шығырҙатып, урттарын сәйнәп булһа ла үҙен тыйырға тырышты.

Бер көндә шулай Дәүләт кис етеп, йәйләүҙән ҡайтҡас, атын Әселе йылғаһы аша сығарып, туғайлыҡҡа тышап ебәрҙе һәм йылға аша сығып барғанда, шишмәнән күнәктәренә һыу тултырып торған Сәлимәне осратты. Сәлимәне күрше ауылға тормошҡа сығып киткәндән тәүге тапҡыр күреүе ине.

Ул ҡапыл - ҡара юғалып ҡалғандай булды , ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына Сәлимә янына килеп ҡулын һуҙҙы:

- Йә, иҫән-һаумы Сәлимә?

- Арыу ғына, үҙең ни хәлдә, ни эш бөтөрәһең тигәндәй? Бер аҙ оялыбыраҡ, Дәүләт Сәлимәне ҡараштары менән баштан аяҡ күҙҙән үткәрҙе. Сәлимә бер аҙ тулыланып, элекегә ҡарағанда ла һылыуланып матурланып киткән кеүек, өҫтөнә кейгән еңел күлдәге, ҡыҫып бәйләгән биллеге, тулы күкрәгенә, ҡабарып торған түшенә бик килешеп тора.

- Дәүләт - беҙ ни колхоз эшенән айның алмайбыҙ, - иртәнге ҡара таңдан, кис ҡояш байып ҡараңғы төшкәнсе ҡырҙа, йәйләүҙә көтөүҙә - тип үҙе кеүек

барлыҡ кешеләргә эштең ҡағылышлы икәнлеген белгертеп яуап бирҙе.

- Ауыр ҡайғыңды ишеттем, күрәһеләрең шул булғандыр инде, ошоноң менән бөтһөн, башҡа ҡайғылар килмәһен инде, - тип йыуатырға тырышты. Ошо осрашыуҙан һуң йөрәгендә яңынан мөхәббәт уты тоҡанды. Дәүләт үҙенә урын тапманы, ятһа ла, торһа ла оҙон көн буйы көтөүҙә йөрөгәндә лә, уйында тик Сәлимә булды. Уның бер аҙ моңһоу йөҙө, әүәлгәсә йомшаҡ ҡына итеп әйткән һүҙҙәре, һомғол кәүҙәһе, күҙ алдында торҙо. Бына көҙ етеп көндәр тамам ҡыҫҡарғас, көтөүселәр йәйләүҙән таналарҙы ҡыуып ҡышҡылыҡҡа ауылға ҡайттылар. Шул кисте Дәүләт Сәлимәнең ата-әсәләре йәшәгән урамға юл тотто. Хәйер, Сәлимә ире Усманды ерләгәс, бер йылға яҡын ҡайны, бейем йортонда йәшәне лә, үҙенә тейеш мал тыуарын эйәртеп, тыуған ауылы Сайырлыға, ата-әсәһе янына күсеп ҡайтты. Таныш йортҡа яҡынлашҡас, йөрәге урынынан сығырҙай булып дөпөлдәп тибә башланы. Үҙен бер шикле кеше кеүек тойоп тирә яғына ҡарана башланы. - Нимәгә, мин бала-саға кеүек, ебеп төштөм, әле утыры кеше кеүек, кеше күҙенә салынырға оялам, - тип үҙен шелтәләп, аҙымдарын шәбәйтте. Бәләкәй ҡапҡаны асып керҙе лә, ҡаршыһына уны таныш ҡойроғон болғап йүгереп килгән Муйнаҡҡа:

- Әй, онотмағанһың икән, молодец, - тип башынан һыйпаны. Тик бына ишек тотҡаһына ҡулы һынылғас йөрәге тағы ла дөпөлдәп тибә башланы. Ул икеләнде, элгәре Сәлимә кейәүгә сыҡмаҫ элек нисектер икенсерәк ине.



- Ҡыҙ янына егет килә инде тигәндәй. Тормошҡа сығып, әҙме күпме ир менән донъя көткән, балалы ҡатын янына килеүсе, өйләнмәгән егет бит әле ул. Дәүләт бар ҡыйыулығын туплап ишек тотҡаһын үҙенә тартты.

Шул кисте Дәүләт Сәлимәне күреп һөйләште. Сәлимә:

– Юҡ, Дәүләт мин бит ирҙә булған балалы тол ҡатын. Ә һин кәләш алмаған егет кешеһең, ата-әсәйең ни тиерҙәр бит әле, - тип ҡыйыр ҡыймаҫ ҡына тәҡдимде кире ҡаҡты. Дәүләт күп уйлап торманы, тотто ла яусы ебәрҙе.

Дәүләттең атаһы ла, әсәһе лә ҡапыл да аптырауға ҡалдылар, бигүк риза түгелдәрен белгерткәндәр ине, Әммә Дәүләттең:

- Алам тигәс алам, миңә Сәлимәнән башҡа бер кем дә кәрәкмәй, - тип ҡырҡа яуап биргәс, риза булдылар. Көҙҙөң һуңғы көндәрендә бер аҙ ҡар яуып, аяҡ аҫты таҙарып, донъя яҡтырып ҡалғас, әллә ни шаулатып булмаһа ла туй яһанылар. Килен төшөрөп, һыу юлын күрһәтеп, барыһын да шартына еткерҙеләр, кеше һөйләрлек булмаһын тинеләр. Ҡышты Сәлимәнең аталарында ҡышлап сыҡтылар ҙа, йәйгә сыҡҡас ҙур булмаһа ла бура бурап, өй һалып сыҡтылар. Икеһе лә тырышып эшләнеләр. Ҡатынына ла, уның ҡыҙы Фәғиләгә лә, Дәүләт бер ауыҙ ауыр һүҙ әйтмәне. Тик Сәлимәнең Фәғиләһен яратҡанда, ара-тирә - Эй былай ҙа Усманыма оҡшар, бәхетең генә булһын инде - тип, Дәүләт алдында булмаһа ла әйткәнен ишетеп ҡалып, ауыр уйға ҡалды, йөрәге ярһып типте.

Минең менән йәшәй, ә йөрәге күңеле менән һаман Усманын онота алмай.Тағы ни үлгән артынан үлеп булмай тере ҡалғандарға ла донъя көтөргә кәрәк, бына оҙаҡламай Дәүләт тә атай буласаҡ, Сәлимә һуңғы ваҡыт күҙгә күренеп көүҙәгә тулылана башлаған ине. Дәүләттең йөрәге ярһып типте. Ҡайһы саҡ ул үҙенә урын таба алмай йонсоно, ары һуғылды, бире һуғылды, ҡулына эш барманы. Ундай саҡта ул Сәлимәгә һынаулы ҡараш ташлап:

- Йә, барыһында һөйләп бир, мин барыһында һиҙәм бит, тигән кеүек ине.

Әйтерһең дә ул үҙенең яратҡан кешеһен сит кеше менән ғишыҡ утында тотҡан. Көн оҙоно яланда көтөүҙә саҡта уға уйланырға ваҡыт бар ине.

- Бына ул Сәлимәне ратты бит, хәҙер ҙә ярата. Яратмаһа балалы ҡатынға өйләнмәҫ ине.

- Әллә ыссынында ата-әсәһен тыңламай, балалы ҡатынға өйләнеп дөрөҫ эшләмәне ме икән, атаһы әйтмешләй:

- Сәлимәнән башҡа ла ҡыҙҙар бөтмәгән.Унан матурыраҡ та һөйкөмлөрәк тә ҡыҙҙар бар бит. Ә Сәлимә уны яратманы бит, уға ҡараманы ла, үҙенең яратҡан кешеһенә кейәүгә сыҡты. Унан ҡыҙы бар.

Бына бит нисек килеп сыға, барыһы ла һин уйлағанса булмай икән шул. Ә күңелең ятмаған, йөрәгең тартмаған кеше менән нисек йәшәмәк ғүмер итмәк кәрәк һуң? Дәүләт хыялый кеше кеүек көн оҙоно көтөүҙә тик ошо турала ғына уйланы баш ватты.Әммә быларҙың барыһын да үҙендә ҡалдырҙы, уйҙарын Сәлимәгә белгертмәне. Үҙен тыныслан-



дырҙы. Бына бөгөн- иртәгә Алла бирһә атай булырға тора, онотолор барыһы ла. Сәлимә лә яңы тормошҡа ылығыр балалары тыуғас һөйөү хистәре тәрәнәйер.

Йәй аҙаҡтарында колхоз бесәнен сабып еткергәс, ауыл кешеләренә лә бесәнгә төшөргә рөхсәт булды. Өйгән күбәләре бер аҙна тирәһе баҫылып, күбә тартырлыҡ булғас, Дәүләт атын егеп арбаһына, һәнәк-тырмаларын тейәне лә:

- Мин таллы үҙәнгә күбә тартырға барам. Һин өйҙә ҡал, йөрөмә, ваҡытың да етеп килә, донъя хәлен белеп булмай - тиһә лә Сәлимәгә:

- Барамсы, нишләп бармай ти, күбә аҫтында ҡалған бесәнде тырмаһамда ярҙам булыр. Ялан күреп ҡайтырмын - тип арбаға менде лә ултырҙы. Шуны ғына көткән кеүек Фәғилә лә әсәһенең эргәһенә арбаға үрмәләне.

Дәүләт бик риза булмай ғына килеште. Төш ауғансы Дәүләт бер-бер артлы күбәләрен аты менән кәбән төбөнә һөйрәтеп ташыны. Фәғилә ирмәк күреп арығансы күбә башына ултырып йөрөнө. Бына шул ваҡыт Дәүләттең башына көтмәгәндә бер мәкерле уй килде. Уның күңеленең бер төпкөләндә Фәғиләгә ҡарата булған сәнскеле уйы, оторо көсәйеп яңырып китте. Әйтерһең дә Фәғилә уларҙың икеһенең араһында бер көртә булып тора. Уларҙың араһын яҡынайтыуҙы ҡамасалаусы сихри бер көскә эйә булып киләсәккә йәшәргә бирмәүсе тылсым эйәһе ине. Сәлимәнең тәүге ире Усмандың үлеүенә дүрт йыл тирәһе ваҡыт үтте бит инде. Ә Сәлимә ҡыҙы Фәғиләгә ҡарап Усманын онота алмай иҫенә төшөрә.

- Әгәр ҙә етәкләп барған атты ҡапыл туҡтатһа, елгә елпелдәп барған бала, осоп төшәсәк, ат менән күбә араһына, шунан күрмәгән булып атты ҡуҙғатып алып китһән, Фәғилә күбә аҫтында ҡаласаҡ, бер аҙ ер үткәс бала күбә аҫтынан сығасаҡ, әммә иҫән ҡалыуына ышаныс булмаясаҡ. Был ҡурҡыныс уйҙарынан Дәүләттең тәненә эҫеле-һыуыҡлы булып китте. Ул - ҡуй, гөнаһы ни тора тип уйланы. Тағы ла Сәлимәһенең ваҡыты етеп, ана-бына тигәндәй йөрөй. Дәүләт аҙаҡҡы күбә төбөнә килеп атын туҡтаты ла Сәлимәгә:

- Һин бар тырмаңды ал да арба яғына атлай тор. - Мин Фәғиләне күбә башына ултыртам да артыңса барып етәрмен - тине.

- Ярар улай булһа шулай итәйем. - Йыйған мәтрүшкәләремде рәтләп арбаға һала торормон, сәй эскән һауыт һабаларҙы ла йыйнарға кәрәк, - тип күңеле берәр нәмә һиҙгән кеүек - ҡыҙым, һин атайың менән бергә атҡа ултырып барырһың йәме - тип аттың бер алдына, бер артына сығып йүгереп уйнап йөрөгән ҡыҙының битенән суп иттереп бер нисә тапҡыр үпте лә шәп-шәп атлап китеп барҙы.

Дәүләт Фәғиләне күбә башына менләреп ултыртты ла:

- Һин нығ тотоноп ултыр, йығылып төшөп ҡуйма, бәләһенән баш аяҡ - тип юрамал Сәлимә ишеттерлек итеп ҡысҡырып әйтте.

- На, малҡай, - тип атын ҡыуҙы.

Ҡара ат еңелсә генә тартып ҡуҙғалып китте. Бер аҙ ер үткәс, Дәүләт ни булһа ла булыр тине лә, атын шып туҡтаты.



Уны быны көтмәгән бала ялп итеп күбә башынан алға табан осоп та төштө.

- Әйҙә малҡай - тип бышылданы Дәүләт, атының ҡолағына әйткән кеүек.

Фәғиләнең ҡурҡышынан – ай тип ҡысҡырған тауышы ярым ярты ғына ишетелеп күбә аҫтында ҡалды. Егерме утыҙ аҙымдай атлағас, Дәүләт артына боролоп ҡараны, ла атын туҡтата һалып, күбә эргәһенә йүгереп килде. Күбәнең артында бергә ышырылып килгән бесәнгә уралған, битләре ҡулдары үләнгә һыҙырылып ҡанап, танырлыҡ та булмаҫлыҡ хәлгә килгән, Фәғиләнең үле кәүҙәһе ята ине.

Дәүләттең күҙ алдары ҡараңғыланып китте, йөрәге сығырҙай булып типте, ул аяҡ быуындарының хәлһеҙләнеүен тойоп Фәғилә янына сүгеп ултырҙы ла

- Сәлимә, Сәлимә - тип ҡырағай тауыш менән ярһып ҡысҡырып ебәрҙе. Дәүләттең ер ярырҙай булып ҡысҡырған тауышын ишетеп, Сәлимә тертләп ялт итеп тауыш килгән яҡҡа боролоп ҡараны. Күңеле ниҙер булғанын һиҙеп тертләп, ҡулына йыйған мәтрүшкә бәйләме төшөп китте. Ул бар көсөнә Дәүләт торған ергә йүгерҙе. Ҡыҙы Фәғиләнең йомғаҡ кеүек бысыранып ҡанға туҙған кәүҙәһен күргәс, күҙ алдары ҡараңғыланып йөрәге туҡтаған кеүек булды. Ул көскә ирендәрен ҡыбырҙатып

- Ни булды Дәүләт? – Ни эшләттең ҡыҙымды? – тип һораны.

- Ни булғанын һиҙмәй ҡалдым бит Сәлимә, күрмәй ҡалдым ни эшләргә һуң - тип күкрәгенә ҡыҫып тотҡан Фәғиләнең үле кәүҙәһенә ҡарап һүҙһеҙ

ҡалды. Сәлимә нисек арба янына атлап килгәнен, нисек арбаға менеп ултырғанын, нисек ауылға ҡайтҡанын, береһен дә хәтерләмәне, барыһы ла нисектер йоҡо аралаш күргән төш кеүек кенә булып ҡалды. Ҡыҙын ерләп ҡайтыуға ул ауырып китте, толғаҡ тота башланы. Бына шулай икенсе балаһы, ир бала донъяға килде. Уға, мәрхүм ҡыҙының исеменә оҡшаш булһын, яҡты иҫтәлегенә арнап Фәһим тип исем ҡуштылар. Дәүләт күңеленән ул исемде өнәп етмәһә лә өндәшмәне, ауыр ваҡытта Сәлимәнең күңелен ҡырыуҙан ҡурҡты. Ул ваҡытта закон һағында тороусо йәмғиәт әһелдәре лә, ауыл кешеләре лә, Сәлимәнең яҡын туғандары ла, ни булғанын ентекләп тикшереп - нитеп йөрөмәнеләр, Хоҙай биргән ғүмере шулай ҡыҫҡа булғандыр инде, барыһы ла аллаһ тәғәлә ҡушҡанса бит тип фарыз ҡылдылар.

Хәйер участковой менән райондан килгән следователь барыһында ентекләп һорашып делоға яҙҙылар ҙа, был фәжиғәле хәлдә Дәүләттең ғәйебе юҡ тип, делоны яптылар. Бер-бер артлы ҡыҙҙары донъяға килделәр, улдары тыуҙы. Йылдар үтеү менән ул енәйәт, енәйәт булып түгел бер хәл, ваҡиға булып, тарих төпкөлөндә тороп ҡалды. Әммә Дәүләттең күҙ алдында кисә генә булған хәл кеүек ине. Ҡайһы саҡ ҡунаҡҡа барып, арыу ғына һалдырып алған саҡта, Дәүләт теле сиселеп китеүҙән ҡурҡты, һәр ваҡыт үҙен-үҙе киҫәтеп тото. Сәлимәһе тәүҙә ниҙер һиҙгән кеүек, ҡайһы саҡ Дәүләткә серле итеп, шул уҡ ваҡыт һорау ҡатыш текләп ҡарап алтыратты. Һис юғында Дәүләткә шулай тойолдо. Был ҡараште:



- Дәүләт әйт миңә дөрөҫөн генә, - Мин бит барыһын да һиҙемләйем - тигән кеүек ине.

Бына ошо тәрән уйҙарҙы уйлап, ҡышҡы ҡар баҫҡан тауҙарға, яландарға ҡарап көрән бейәнең еңел генә юртҡанына, сананың ҡышҡы юлда ара-тирә шығырҙап ҡуйыуына ҡолаҡ һалып килә торғас, нисек итеп көбән төбөнә еткәнен дә һиҙмәй ҡалды. Дәүләт атын кирегә ҡайтыу яғына бороп ҡуйғас, ҡыҫҡа тунын сисеп ҡар өҫтөнә ырғытты ла, йәштәрсә еңеллек менән бесәнде санаға тейәй башланы. Бер аҙ санаға тейәгәс, менеп тапап төштө. Бесәненең йәшеле, мал ашарлығы уртаса йөктәй булды, ә ҡарайып бурһый башлағанын Дәүләт ҡарт тейәп торманы. Арҡан менән көсө йеткәнсе тартып бәйләне лә, тәүҙә тунын йөк башына бәрҙе, һәнәген йөгөнөң урта тирәһенә кәҙәне лә, атының һыртында ятҡан дилбөгәһен ҡулына алып йөк башына үрмәләп менеп ултырҙы. Тунын кейгәс аяҡтарын йөк алдына һәлендереп уңайланып ултырҙы ла,

- На, малҡай, әйҙә ҡайтыу яғына, - тип күңелле һөрәнләне. Бер аҙ барғас тирләгән тәне, әллә арығанлығын тойоп йомшарҙы. Дәүләт ҡарт үҙе лә һиҙмәҫтән, тәне ойоп йоҡоға талды. Күпмелер ер үткәс, дилбөгәһе ҡулынан ысҡынып аҫҡа төштө, шунан сана табаны аҫтына эләгеп аттың ауыҙлығын тартты. Көрән бейә дилбөгә тартылғас, ҡапыл атлап барған еренән туҡтаны. Йоҡомһорап барған Дәүләт ҡарттың кәүҙәһе ялп итеп, йөк башынан алға табан осоп та төштө. Көрән бейә ҡапыл тертләп, бар көсөнә алға ырғыны һәм тәүҙә ҡуш аяҡлап сапты, шунан

ярһыуы баҫылғас ҡына, атлауға көстө. Дәүләт ҡарттың кәүҙәһе күпмелер ер сана аҫтында ышырылып барҙы, шунан ҡанға батып, йомғаҡ кеүек, ҡышҡы ҡарлы юлда ятып ҡалды. Күрәһең бейә, ауыл урамы буйлап йөгә менән үтте лә, көндә сереп сығып йөрөгән хужаһының ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны. Быны тәҙрә аша күреп ҡалған Хөснөлхаҡ.

- Ай, һай, берәр хәл килеп сыҡҡандыр ахыры был ҡарт менән. Йә йөгәнөң башынан ҡолап ҡалған, йә иһә күрән бейә ҡарттың йөк башына менеп ултырғанын көтмәй тайған, тип һөйләнә-һөйләнә, мамыҡ һырмаһын ҡабаланып кейеп, тышҡа аты янына ашыҡты. Сана аҫтында һөйрәлеп килеп боҙланған дилбегәне һөйрәп сығарҙы, үрелеп йөктө ҡараны:

- Йә, инде һәнәге кәҙәүле тора, ә үҙе юҡ, - тип һөйләнә-һөйләнә атын бороп ауыл уртаһынан үткән юлға сығарҙы. Атын етәкләп Дәүләт ҡарт йәшәгән өй яғына атланы. Ҡапҡанан ингәс атты кәртә эргәһенә килтереп туҡтатты ла, үҙе өйгә ашыҡты. Хөснөлхаҡтың ҡабаланып атлығып килеп инеүенә Сәлимә әбейҙең ҡобараһы осто. Ни әйтергә белмәй телһеҙ ҡалды . Хөснөлхаҡ бер-ике һүҙ менән хәлде аңлатты ла:

- Хәҙер йөктө тиҙ генә бушатам да эҙләп китәм.

- Ни булғанын әйтеүе ҡыйын - тип тышҡа ашыҡты. Ишекте ябыр алдынан:

- Ә кәбәнегеҙ шул Өйәңке буйында, йылда сапҡан ерегеҙҙәлер бит - тип әбейҙән һораны.

- Эйе, шунда, шунда, - Эй хоҙайым, ни булды икән



инде - тип һамаҡланы Сәлимә әбей. Хөснөлхаҡ бесән тейәгән йөктө тиҙ генә һәнәк менән төртөп ауҙарҙы ла санала үрә баҫып ҡапҡанан елдереп сығып китте. Хөснөлхаҡ сығып киткәс Сәлимә әбей: - Эй хоҙайым, тере генә булһын инде - тип тәҙрәгә ҡапланып урамға күҙ атты. Үҙе бер туҡтауһыҙ һөйләнде, - Әйттем бит инде яңғыҙың йөрөмә тип, тыңламаны, исмаһам берәр малай-шалайға әйтһәк тә иптәш булыр ине бит. Сәлимә әбей түҙмәне, тиҙ генә кейенде лә тышҡа сыҡты. Ҡапҡа төбөндә тапанып торҙо, урамдың бер яғына, икенсе яғына ҡараны.

Хөснөлхаҡ Дәүләт ҡарттың һыуынып бөгәрләнеп ҡатҡан үле кәүҙәһен санаға тейәп алып ҡайтыуға, ҡышҡы ҡыҫҡа көн кискә табан ауышҡан ине. Дәүләт ҡартты ерләргә ауыл халҡы ғына түгел, күрше яҡын тирә ауылдарҙан да, был фажиғәле хәлде ишеткәндәр һәм Дәүләт ҡартты белгәндәр, барыһы ла килделәр. Өлкән быуын кешеләре, кесерәктәре лә, Дәүләт бабайҙың йәш сағында нисек Сәлимәнең артынан йүгергәнен, нисек өйләнгәнен, нисек Сәлимәнең бер гонаһһыҙ йүгереп йөрөгән сабый балаһы, күбә тартҡан саҡта бесән аҫтында ҡалып һәләк булғанын, барыһын да күҙ алдына килтергән кеүектәр ине. Ауыҙ асып әйтмәһәләр ҙә һис юғында, кешеләрҙең ауыр тойғоло ҡараштары быны әйтәләр кеүек ине.



Мөхәммәт Исмәғил улы Илбаев 1939 йылдың 13 мартында Ейәнсура районы Мөхәммәтйән ауылында донъяға килә. Башҡорт ауыл хужалығы институтының зоотехника факултетын тамамлап, һөнәре буйынса төрлө яуаплы вазифалар башҡара. Үҙенең һөнәри эш бурысын башҡарыу менән бер рәттән, йәштән үк мауыҡҡан шиғриәт ижадын да ташламай.

Өс китап авторы, Рәсәй федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы яҙыусылар союзы ағзаһы. Шаулап-даулап йәшәмәнс Мөхәммәт Исмағил улы. Бик күп тә яҙманы. Әммә ҡәләме һыҙған, ташҡа баҫылған һәр әҫәре ҡом өйөмө араһында ялтлап киткән алтын бөртөгөләй күңелдәрҙе арбаны, хисләнергә уйланырға мәжбүр итте.

Уның әҫәрҙәренең шиғри теле - башҡорт балы кеүек күңелгә яғымлы тәмле, йәмле һәм ижад һөйөүселәргә ижади этәргес биреүгә һәләтле яҡшы ҡуланма була ала.



Шиғырҙарым, булдығыҙ һеҙ
Баш бирмәҫтәй бер тай тулаҡ.
Аҡҡы-тиңке иттегеҙ һеҙ,
Тәртәләргә һыймай тулап.
Шиғырҙарым - ҡулдан килгән
Хәтлем бесеп тегелгән тун.
Ошо тунды кейеүселәр
Йылыһырмы икән һуң?

## Оса ҡоштар

Оса ҡоштар ҡышлауға ла,
Бер бағайыҡ хушлауға.
Иртәнсәк беҙ имен инек,
Ниҙәр булыр төш ауһа.

Осҡан коштар ҡайырылып,
Ҡайтыр тағы яҙлауға.
Беҙҙең ҡанат ҡағыштары-
Көн дә көндә һанауҙа.

Көндә айға тартҡы килә,
Айҙы йылға һуҙаһы.
Шаулап аға йыл-йылғалар...
Башы алтын ҡаҙған ерҙә,
Көмөштәме аҙағы?

Ҡышлауға ла оса ҡоштар
Шуларға бер бағайыҡ,
Был илаһи донъяларға,
Көн дә хайран ҡалайыҡ.

## Аҡ һарыҡ

- Эй, аҡ һарыҡ, аҡ һарыҡ,
Ҡайҙа йөрөйһөң аҙып?
-Тау битендә туҡланам бит,
Үлән баштарын ҡабып.

- Эй, аҡ һарыҡ, аҡ һарыҡ,
Йөрөмә һуңға ҡалып.
- Һуңға ҡалһам - белеп торам,
Китер шул бүре алып.

## Яу һалдатына хат

- Одеял ябынаһыңмы,
Юрған ябынаһыңмы?
Мине төштәреңдә күреп,
Илап уянаһыңмы.

- Одеял да юҡ бында,
Юрғаны ла юҡ бында.
Эсњәрҙтәр шартлап тора,
Һинең ҡайғың юҡ бында.

*(Халыҡ һүҙҙәре).*

Эй хоҙайым!...Тимәҫ инем,
Иҫән генә булһаң, Иҫәнгол!...
Миңә ауыр булған саҡта
Еңел генә иҫкән елдәй бул.



Тын алыуҙарым үҙгәрер
Һине күргәндәй булып.
Уйға батып ултырам бит,
Күҙемә йәштәр тулып.

Нисә генә хат яҙҙым һуң,
Таҡмаҡлап та һамаҡлап.
Күңелеңде күтәрәм тип...
Ҡайғы алдым һәр яҡлап.

Киткән саҡта
Дошмандарға
Ҡәһәрле ине үсең
Бүре суҡмары хәтлем дә
булманымы ни көсөң?

Ауыл осона сығып та
Өлгөрмәнең түгелме?
«Ур-ра, ур-ра!» - тигән булып,
Утҡа һалдың үҙеңде.

Утҡа һалдың үҙеңде лә
Мине ҡайғыға һалдың.
Донъя көтөр саҡта ғына
Быңа – аптырап ҡалдым...

Һин һораҡкас, эй ҡыуандым,
Бер ҙә ҡайғы көтмәнем...
...Исмаһам, шул
Өй бураһын
Күтәртеп тә бөтмәнең.

Хәҙер уны кем күтәрә
Өмә итер кеше юҡ
Сулаҡ «силсәүит» «һуғыш...» - ти,
Миндә уның эше юҡ.

Һарына кеүек һары итеп
Картуф киптертә үҙе.
Ойоҡ, бейәләй бәйләтә...
«Һуғыш, һуғыш! » - бар һүҙе.

Туйға төшкән тайың йөрөй,
Һине эҙләп ер тапай.
Күҙемә ҡарап һорай кеүек;
«Ҡайҙа булды һуң, ҡайтмай?».

Артыҡ мал тип һанамайым,
Әммә колхозға «инһен».
«Һалдатҡа» киткән аттарға
Алмаш булһын ул, тимен.

Һин киткәс тә,
Күкте ябып,
Ҡорт боларҙы, саҡ «тыйҙыҡ».
Туйға япҡан күс ҡайтманы...
Был хәлдән хәүеф тойҙоҡ...

Туй һандығымда – бүләктәр...
Күбеһе ҡулға теймәгән.
Бүләк биргән саҡта
Кемдер
«Тигеҙ ғүмер!» тимәгән...



Миңә ун һигеҙ әә тула...
Кит, шуны ла белмәйһең!
Ер аҫтынан сыға алмайһың,
Унда нимә эҙләйһең?...

Ер өҫтөндә мин бар бит һуң,
Өн бир, барып етәм ул,
Тыным менән йән өрәм дә
Алып ҡайтып китәм ул.

Килгәнемде һиҙһәң, үҙең
Һикереп тороһоң әле...
Илатма мине, Иҫәнғол,
Илатма мине, йәме!...

Ә мин һиңә бер сер әйтәм
Ишеткән бул, Иҫәнғол:
Оҙаҡламай улың тыуа!
Бирһен Хоҙай тигән бул.

Ә мин ҡайҙан белә, тиһең,
Кендек әбейе юрай.
Ултыра торғас, уйлап ҡуйҙым.
Ил тағы һалдат һорай.

Ҡарттарыбыҙ әйтә бит һуң
«Ир бөтмәһә ил бөтмәй»
Береһе лә әйтмәй бына
«Һуғышып донъя берекмәй»

«Нишләп һуғышалар? тиһәм,
Донъяһы шулай имеш!
Һуғыш- батшалар эше ул
Илде һаҡлау – беҙҙең эш…

Һин һораҡас, эй ҡыуандым,
Һис тә ҡайғы көтмәнем.
Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ икелә…
Яҙып һүҙем бөтмәне.

Һуғыш бөткәнсе яҙһам да
Һине терегә һанап,
Яҙғанымды…бетеү итәм,
Улың уҡыһын аҙаҡ…

Эй, Хоҙайым!… тимәҫ инем,
Иҫән булһаң, Иҫәнғол.
Тыуаһы балаһы хаҡына
Иҫемдә гел иҫән бул…
Хуш, хәҙергә…





Иҙрисов Ғилман Уйылдан улы 1948 йылда Ейәнсура районы Мөхәммәтйән ауылында донъяға килә. Абзан ауылы урта мәктәбен тамамлағас, бер йыл, Юлдаш 8 йыллыҡ мәктәбендә, уҡытыусы булып эшләй. Бала саҡтан хисле, йыр-моңға ғашиҡ булып үҫкән Ғилман Уйылдан улы, күп уйлап тормай, Өфө сәнғәт институтына уҡырға инә. Сәнғәт институтында уҡыған осорҙа уҡ ул, шиғырҙар яҙа башлай. Уның шиғырҙары, башҡа шиғырҙарҙан, тәрән хисле, йөрәккә үтеп инерҙәй һәм шул уҡ ваҡытта, фәһемле булыуы менән, айырылып торалар. Билдәле композиторҙар Рим Хәсәнов, Венер Мөхәмәҙиев уның шғырҙарына йырҙар ижад итәләр.

Был йырҙар халыҡ араһында киң таралып, тиҫтәләгән йылдар үтһә лә Башҡортостан да ғына түгел, сит өлкәләрҙә лә, йырсылар һәм халыҡ бик яратып йырлайҙар. Иртә китте беҙҙең арабыҙҙан Ғилман Уйылдан улы. Уның ижад юлы ҡыҫҡа булды. Әммә уның яҙған шиғырҙарына ижад ителгән йырҙар алтын бөртөгө кеүек, башҡа йырҙар араһында айырылып торалар.

# Бер ҡайтаһы ине тыуған яҡҡа

*Ғ. Иҙрисов һүҙ. В Мөхәмәҙиев муз.*

Бына тағы китәм алыҫтарға,
Тыуған яғым, һинән айырылып.
Тыуған яғым, һинән айырылып,
Һөйгәнемде һиндә ҡалдырып.

Ҡушымта.

Зәңгәр томандар артында,
Бик алыҫтарҙа ҡалһам да.
Мин йырлармын өҙөлөп- өҙөлөп,
Тыуған яғым, һине һағынып,
Йөрәккәйем әрнеп янғанда.

Бик һағындым иген яландарын,
Күк тирәкле Әйек буйҙарын.
Йәмле яҙҙа йөрәк елкендереп,
Шаулап үткән һабан туйҙарын.

Ҡушымта.

Бер ҡайтаһы ине бала сағым
Ялан аяҡ йөрөгән сағыма.
Бар ҡайтаһы ине йәшлегемә
Тәүге мөхәббәтем янына.

Ҡушымта.



# Бер ҡайтмаһам әсәй бер ҡайтырмын

*Ғ. Иҙрисов һүҙ.*

Ҡайтырмын тип, хаттар яҙыуыма,
Айҙар түгел, йылдар үттеләр.
Әммә юлдарым, һиңә илтмәйенсә,
Алыҫтарға, алып киттеләр

Ҡушымта.
Бер ҡайтмаһам, әсәй бер ҡайтырмын,
Утыңды, һүндермәй һин мине көт,
Һине көттөрөп, тә ҡайта алмаһам,
Кисер мине, әсәй ғәфү ит.

Көтәһеңдер, хат ташыусы килһә,
Ҡош телендәй, сәләм барҙыр тип.
Хат булмаһа, өмөт итәһеңдер,
Иртәгә лә, бәлки булыр тип.

Ҡушымта.
Бер ҡайтмаһам, әсәй бер ҡайтырмын,
Утыңды, һүндермәй һин мине көт.
Һине көттөрөп, тә ҡайта алмаһам,
Кисер мине, әсәй ғәфү ит.

Ҡайтыр юлға, сығам ҡайтыр юлға,
Утыңды, һүндермәй һин мине көт,
Һине көттөрөп, тә ҡайта алмаһам,
Кисер мине, әсәй ғәфү ит.

## Ауылға бер ҡайтып китәйек

*Ғ. Иҙрисов һүҙ.*
*Ф. Әбдрәшитов муз.*

Әйҙә әле, дуҫҡай, алсы гармуныңды,
Ауылға бер ҡайтып китәйек.
Оноҡҡандар икән тимәһендәр,
Урамдарҙан йырлап үтәйек.

Беҙ йәш саҡта һөйгән һылыуҙарҙың,
Йоҡоларын бүлеп үтәйек.
Урам буйлап йырлап, гармун уйнап,
Үҙәктәрен өҙөп китәйек.

Әйҙә әле, дуҫҡай, алсы гармуныңды,
Йәшлеккә бер ҡайтып урайыҡ.
Был донъяла беҙҙә бар икәнде
Иҫтәренә төшөрөп уҙайыҡ.
Ауылға бер ҡайтып китәйек.

## Һағыныу йыры

*Ғ. Иҙрисов. һүҙ. Р хәсәнов. муз.*

Аҡ сәскәләр кеүек ҡар яуа,
Хәтерләтеп йәмле май кисен.
Муйыл сәскә атҡан туғайҙа,
Йөрөгән инек икәү нур кисеп.



Тормош юлдарыбыҙ шул кистә,
Айырылды төрлә яҡтарға.
Ә щулайҙа иркәм гел иҫтә,
Алыштырмам уны яттарға.

Араларҙа таныш юлдар бар,
Үтәр инем дә бит арымай.
Осрашырға нисә йылдар бар,
Нисек түҙәрмен һуң һағынмай.

## Ҡаршыма кил һөйөклөм

*Ғ. Иҙрисов һүҙ.*
*Ф. Әбдрәшитов муз.*

Өфө урамдары буйлап, һинең хаҡта уйлап
Яңғыҙ үтә минең иртә кистәрем.
Айҙар, йылдар үтә, күңел өмөт итә,
Һүндермәйсә һөйөү хистәрен.

Өфө урамдары буйлап, елдәр иҫә уйнап,
Урай-урай ҡарҙар яуалар.
Яуа ап-аҡ ҡарҙар, алыҫ әле яҙҙар,
Яҡынаймай беҙҙең аралар.

Өфө урамдары буйлап, тирә-яҡты нурлап,
Ҡаршыма кил, минең һөйгәнем.
Шатлығым да һин бит, һағышым да һин бит,
Ҡаршыма кил, минең һөйгәнем.

# Һиңә килдем иркәм

*Ғ. Иҙрисов һүҙ.*
*Р Хәсәнов муз.*

Һиңә килдем иркәм,
Үткән юлдарымдың
Һанай-һанай алыҫ саҡрымдарын,
Килдем, тормошомда
Кисеп яҙмышымдың
Шатлыҡтарын, һағыш ялҡындарын.

Һиңә килдем, иркәм,
Килдем йылдар буйы
Һанай-һанай алыҫ көндәремде,
Баҫа алмайынса
Ярһып яныуҙарын
Әрнеп өҙгәләнгән йөрәгемдең.

Һиңә килдем, иркәм,
Бик һағынып килдем,
Шаулап-гөрләп йәмле яҙҙар еткәс,
Йыраҡтарҙан яҙған
Сәләм хаттарыңды
Көтә-көтә түҙемлегем бөткәс.

Изд. лиц. № 0230 от 03.09.97
Сдано в набор 02.05.2015 г. Подписано в печать с авторского оригинал-макета 02.06.2015 г.
Формат 60×84 1/16. Бумага писчая. Гарнитура «BelSAGZ». Печать трафаретная.
Заказ 2061. Тираж 100.
Министерство связи и массовых коммуникаций
Республики Башкортостан
Мелеузовский информационный центр -
филиал ГУП РБ Издательский дом «Республика Башкортостан».
453850, РБ, г. Мелеуз, ул. Воровского, 6.
Тел.: (34764) 3-15-10, 5-27-53.

